# Милли мәғариф торошо һәм үҫеш перспективалары

Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитетының быйылғы тәүге киңәйтелгән ултырышы милли мәғариф проблемаларына арналды. Ултырышта төп доклад менән Башҡарма комитеттың Милли мәғариф һәм кадрҙар әҙерләү буйынса комиссияһы рәйесе, профессор И.Ғ.Аҡманов сығыш яһаны.

Артабан ҡоролтай трибунаһына күтәрелгән Башҡортостан Республикаһы мәғариф министры урынбаҫары А.Ш.Сурин һәм башҡалар күрһәтеүенсә, республика хөкүмәте, министрлыҡ, ҡоролтай Башҡарма комитеты тырышлығы менән милли мәғариф өлкәһендә һиҙелерлек уңыштарға өлгәшелгән. Мәҫәлән, Бәләбәй ҡалаһында башҡорт гимназияһы өсөн яңы бина һалынған, Нефтекама башҡорт гимназияһы ла оҙаҡламай яңы бинаға күсәсәк. Мәктәптәрҙә юғары белемле башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусылары һаны 2913-кә еткән. Шул уҡ ваҡытта милли мәғариф эшмәкәрлегендә етди етешһеҙлектәр булыуы ла күрһәтелде. Мәҫәлән, бөгөнгө көндә бары 13 район үҙәгендә генә башҡорт гимназиялары эшләй, Өфө ҡалаһының Дим, Ленин райондарында ла башҡорт мәктәптәре асыу мәсьәләһе хәл ителмәй, республика баш ҡалаһы мәктәптәрендә башҡорт телен дәүләт теле булараҡ уҡытыу өсөн тәғәйенләнгән аҡнаһына өс сәғәтлек минимум талабын боҙоуға юл ҡуйыла, юғары белемле йәш белгестәрҙең торлаҡ шарттарына иғтибар етешмәү, эш хаҡы түбән булыу сәбәпле, уларҙың мәғариф өлкәһенән ситләшеүе күҙәтелә. Киңәйтелгән ултырыш ҡабул иткән резолюцияға ярашлы, ҡоролтайҙың милли мәғариф өлкәһендәге сәйәсәтен билдәләү маҡсатында махсус комиссия төҙөлдө. Ә.М.Сөләймәнов, Ф.Ғ.Хисамитдинова, Р.А.Күзбәкова, Р.М.Вәлиәхмәтов, Ғ.С.Ҡунафин, Ф.Б.Санъяров, Ә.С.Ғаязов һәм Г.М.Юламанова ингән комиссияға Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайының ”Милли мәғарифты үҫтереү буйынса 2006—2010 йылдарға программаһы”н төҙөү йөкмәтелде.

Сығыш яһаусыларҙың фекеренсә, башҡорт теленең үҫешен тәьмин итерлек социаль-мәҙәни мөхиткә иғтибар артырға тейеш. Бөгөнгө шарттарҙа ошо өлкәлә радио менән телевидение ҙур роль уйнай, әммә, күптәр раҫлауынса, һуңғы йылдарҙа башҡорт телендәге тапшырыуҙар күләме кәмеүгә юл ҡуйыла, популяр алып барыусылар эфирға сыҡмай башланы. Киңәйтелгән ултырыш резолюцияһына башҡорт телендәге телевидение һәм радио тапшырыуҙарын арттырыу, уларҙың сифатын күтәреү тураһында айырым пункт индерелде.

Уҡыусылар иғтибарына Башҡарма комитеттың Милли мәғариф һәм кадрҙар әҙерләү буйынса комиссияһы рәйесе Ирек Ғайса улы Аҡмановтың сығышын тәҡдим итәбеҙ. Сығыш оригинал телендә бирелә.